Балаларға бағышланған Изге Яҙмалар

Тәҡдим итә

# Алла бөтә нимәне яралтканда



Автор: Edward Hughes

Кәүҙәләндерелгән: Byron Unger; Lazarus Alastair Paterson

Яраҡлаштырылған: Bob Davies; Tammy S.

Тәржемә: www.christian-translation.com

Сығарылған: Bible for Children
www.M1914.org

©2021 Bible for Children, Inc.
Лицензия: Һеҙҙең күсермәгеҙ һатыуға тәғәйенләнмәгән булһа, был хикәйәне күсерергә йәки баҫтырырға хоҡуҡығыҙ бар.



Беҙҙе кем барлыҡҡа килтерҙе? Изге Яҙмалар, Алла һүҙе, кешелектең нисек барлыҡҡа килгәне тураһында һөйләй. Күптән элек Алла беренсе кешене барлыҡҡа килтерҙе һәм уға Әҙәм тип исем ҡушты. Алла Әҙәмде туфраҡтан яралтты. Алла Әҙәмгә тормош һулап, терелтте. Ул үҙен Эдем тигән матур баҡсала тапты.



Алла Әҙәмде яралтҡансы, матур әйберҙәр менән тулған иҫкиткес донъя булдырҙы.  Аҙым һайын Алла ҡалҡыулыҡтар һәм тигеҙлектәр, хуш еҫле сәсәкәләр һәм бейек ағастар, сағыу төҫлө ҡоштар һәм шаулаған умарта ҡорттары, киттар һәм тайғаҡ йыландар яһаны.



Ғәмәлдә, Алла бар нимәне - бар нимәне барлыҡҡа килтерҙе.



Башта, Алла берәй нимә яралтҡансы, Алланан башҡа бер нимә лә юҡ ине. Кешеләр ҙә, урындар ҙа, әйберҙәр ҙә юк ине.  Бер кем дә. Яҡтылыҡ, ҡараңғылыҡ юҡ. Өҫ менәнә аҫ та юҡ.  Кисә түгел, иртәгә түгел.  Башы булмаған бер генә Алла бар ине. Шуннан һуң Алла эшен башланы!





Башта Алла күктәрҙе һәм ерҙе яралтты.



Ер формаһыҙ һәм буш ине.  Упҡын өҫтөндә ҡараңғылыҡ ине. Шуннан һуң Алла: "Яҡтылыҡ булһын", - тине.





Һәм яҡтылыҡ бар булды.  Алла яҡтылыҡты көн тип атаны, ә ҡараңғылыҡты - төн тип.  Кис булды, таң атты - беренсе көн.





Икенсе көндө Алла океан, диңгеҙ һәм күк аҫтындағы күлдәрҙе тәртипкә килтерҙе.  Өсөнсө көндө Алла әйтте: "Ҡатылыҡ булһын".  Һәм шулай булды.



Алла шулай уҡ үләндәргә, сәскәләргә һәм ҡыуаҡтарға күренергә кушты. Улар бар булдылар. Кис булды, таң атты - өсөнсө көн.



9

Шуннан һуң Алла кояшты һәм айҙы барлыҡка килтерҙе, һәм бер кем дә һанай алмаҫлыҡ итеп бик күп йондоҙҙарҙы бар итте. Кис булды, һәм иртә килде - дүртенсе көн.



10

Алла исемлегендә артабан диңгеҙ йән эйәләре һәм коштар булды. Бишенсе көндә ул ҙур ҡылыс балыҡтарҙы һәм кес кенә сардиналарҙы, оҙон аяҡлы страустарҙы һәм кес кенә шат күңелле колибри коштарын бар итте. Алла һәр кошто ер һыуҙарын тултырыу өсөн, һәр кошто ерҙә, диңгеҙҙә һәм күктә йәшәр өсөн яралтты. Кис булды, таң атты - бишенсе көн.



11

Уннан һуң Алла тағын һөйләшә башланы. Ул әйтте: "Ер тере йән сығарһын". Һәм һәр януар, бөжәктәр һәм һөйрәлеүселәр бар булды. Ерҙе тетрәтә торған филдәр, эш һөйөүсе ҡондоҙҙар килде. Насар маймылдар, крокодилдар. Борма-борма селәүсендәр һәм ҙур яңаҡлы әлгәнйәктәр. Һонтор жирафтар һәм мырылдауыҡ бесәҙәр. Һәр бер йән эйәһе ул көндө Алла тарафынннан яралтылған.

Һәм кис булды, һәм таң атты – алтынсы көн.



12

Алтынсы көндө Алла гәҙәти булмаған эш эшләне. Кеше өсөн бар нимә лә әҙер ине. Ҡырҙарҙа ризык һәм уға хеҙмәт итер өсөн хайуандар бар ине. Һәм Алла әйтте: "Әйҙәгеҙ, кешене үҙ образыбыҙҙа яһайыҡ. Ул ерҙәге бар нимә менән иҙара итһен". Һәм Хоҙай Тәғәлә үҙ образы буйынса кешене яралтты; АЛЛА образы буйынса ул уны бар итте ...



13

Алла Әҙәмгә шулай тине: “Баҡсалағы төрлө ағастарҙың емештәрен ашарға мөмкин, тик яҡшылыҡ һәм яманлыҡ ағасынан ашама. Сөнки шул ағастан емеш ашаған көндө үк һин үлем менән үләсәкһең.”



14

Һәм Хоҙай Тәғәлә әйтте: “Кеше ялғыҙ булыу яҡшы түгел, әйҙәгеҙ уға ярашлы булған ярҙамсы яралтайыҡ”. Алла бөтә ҡыр хайуандарын һәм барлыҡ күк ҡоштарын Әҙәм янына килтерҙе. Әҙәм уларҙың һәр береһенә исем биргән. Моғайын, ул был бөтә эштәрҙе эшләргә бик акыллы булғандыр. Ләкин барлыҡ ҡоштар һәм тереклектәр араһында Әҙәм өсөн яраҡлы ярҙамсы юк ине.



15

Алла Әҙәмгә тирән йокы өрҙө. Уның ҡабырғаһының береһен һуҙып, Алла Әҙәм кабырғаһынан ҡатын яһаны. Алла яралтҡан ҡатын Әҙәм өсөн камил партнер ине.



16

Алла бөтәһен алты көн эсендә яралтты. Алла етенсе көндө фатихаланы һәм уны ял көнө итте. Эдем баҡсаһында Әҙәм һәм уның ҡатыны - Һауа Аллаға буйһондолар һәм бәхетле булдылар. Алла уларҙың Раббы, Ярҙамсыһы һәм Дуҫы булды.



17

Алла бөтә нимәне яралтканда

Алла Һүҙеннән, Изге Яҙманан хикәйә

урынлашҡан

1-2 йәшәйеш

“Һинең һүҙҙәреңдең асылыуы мәгърифәтле.”
Мәдхия 119:130

18




1 60

19

Был Изге Яҙма хикәйәһе һеҙҙе бар иткән һәм Уны танып белеүен теләгән иҫкиткес Алла тураһында һөйләй.

Беҙҙең насар эштәр эшләгәнде Алла белә, һәм был эштәрҙе ул ғонаһ тип атай. Ғонаһ өсөн яҙа – үлем, ләкин Алла һеҙҙе шул тиклем ярата, хатта үҙенең берҙән-бер улы Ғайсаны һеҙҙең өсөн тәрелә үлергә һәм ғонаһтарығыҙ өсөн язаланырға ебәрҙе. Унан һуң Ғайса терелтелде һәм өйөнә күккә ҡайтты. Әгәр ҙә һеҙ Ғайсаға ышанһағыҙ һәм унан ғонаһтарығыҙҙы кисереүен һораһағыҙ, ул уны эшләйәсәк. Ул һеҙҙең тормошҡа инер, хәҙер һеҙҙең күңелдә йәшәр, һәм һеҙ уның менән мәңге йәшәрһегеҙ.

Әгәр ҙә һин быны дөрөҫлөгөнә ышанһаң, Аллаға былай тип әйт: Хөрмәтле Ғайса, мин ышанам, Һеҙ Алла һәм минең ғонаһтарым өсөн үлер өсөн кеше булдығыҙ, терелтелдегеҙ һәм бына хәҙер һеҙ яңынан тере. Мин хәҙер яңы тормош башлар өсөн, зинһар минең тормошҡа инегеҙ һәм ғонаһтарымды кисерегеҙ, һәм бер көн барып, мәңге һеҙҙең менән булырмын. Һиңә буйһонорға һәм Һинең Балаң кеүек йәшәргә булыш миңә. Амин.

Изге Яҙманы уҡы һәм Алла менән көн һайын һөйләш. Иван 3:16

20